# Шәрек беҙҙең булмышыбыҙҙа

*Быйыл 26—27 сентябрҙә баш ҡалабыҙ Өфөлә V Бөтә Рәсәй шәрҡиәтселәр съезы үткәрелде. Төрлө төбәктәрҙән йыйылған абруйлы ғалимдар "Рәсәй халыҡтарының тарихи яҙмышында — Шәрек" тип аталған форумда үҙҙәренең һуңғы ике йыл эсендәге ҡаҙаныштары тураһында фекер алышты, булған проблемаларҙы хәл итеү юлдарын билдәләне, киләсәккә бурыстар ҡуйҙы.*

*Шәрҡиәтселәрҙең 2004 йылда Мәскәүҙә үткәрелгән IV съезында Рәсәй Фәндәр академияһының Шәрҡиәтселәр йәмғиәте президенты итеп Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының Гуманитар фәндәр бүлеге академик-секретары, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы ректоры Ишмөхәмәт Ғилметдин улы Ғәләүетдинов һайланғайны. Был күркәм ваҡиға, Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда шәрҡиәтселектең торошо, киләсәккә ҡуйылған маҡсаттар хаҡында уның менән әңгәмәләшәтек.*

**— Белеүебеҙсә, Рәсәйҙә шәрҡиәт фәненең тамырҙары тәрән, тарихы бай. Әммә был йүнәлештә эш һуңғы бер нисә тиҫтә йылда айырыуса йәнләнеп китте. Был нимәгә бәйле? Заман, үҙгәреп торған шарттар һәм уларҙың фәнгә йоғонтоһо хаҡында бер ни тиклем һөйләп китһәгеҙ ине.**

— Рәсәй шәрҡиәтселәр йәмғиәте үҙенең тарихын 1900 йылдың 29 февралендә финанс министры С.Ю.Витте тарафынан ҡул ҡуйылған "Рәсәй шәрҡиәтселәре йәмғиәтенең уставын раҫлау тураһында" приказынан алып иҫәпләй. Тимәк, уға быйыл 106 йыл тулды.

Йәмғиәт эргәһендә шәрҡиәтселәр курсы ойошторола, ул тиҙҙән Ғәмәли шәрек академияһына әйләнә һәм хакимиәт, илселек, сауҙа-сәнәғәт хеҙмәттәре өсөн шәрек телдәрен һәм илдәрен белгән хеҙмәткәрҙәр әҙерләй башлай. Академияла уҡыусылар үҙҙәренең теләге буйынса ҡытай, япон, монгол, фарсы, төрки телдәр бүлектәрендә шөғөлләнә. 1910 йылда Шәрҡиәтселек йәмғиәтендә грузин, әрмән, татар, әзербайжан һәм үзбәк телдәре буйынса курстар эшләй башлай һәм 1912 йылдан уларға академик Н.Я.Марр етәкселек итә. Йәмғиәт алдына Рәсәйҙең Шәрек илдәре менән яҡынлашыуына һәм Рәсәй биләмәләрендәге һәм сит илдәрҙәге шәрек халыҡтары араһында рус мәҙәниәтен таратыуға хеҙмәт итеү бурысы ҡуйыла. 1908 йылдың 12 октябренән ул "Рус ориенталистары йәмғиәте" тигән яңы исем менән йөрөтөлә башлай. Программаһында шул осорҙағы Шәректе лингвистик, филологик, тарихи, ижтимағи-сәйәси, иҡтисади йәһәттән өйрәнеү, рус йәмғәтселеген Шәрек халыҡтары һәм илдәре менән таныштырыу, Шәрек халыҡтары араһында Рәсәй тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәр таратыу, Рәсәй һәм Шәрек халыҡтарының үҙ-ара файҙа нигеҙенә ҡоролған мөнәсәбәттәренә булышлыҡ итеү бурыстары көҙ уңында тотола.

Әммә 1918 йылда Шәрҡиәтселек йәмғиәте һәм уның тарафынан ойошторолған Ғәмәли шәреҡ академияһы бөтөрөлә. Оҙаҡ йылдар уның эшмәкәрлеге Рәсәй Фәндәр академияһының иң өлкән фәнни учреждениеларының береһе булған Шәрҡиәт институты базаһында алып барыла.

1979 йылда СССР Фәндәр академияһының Бөтә Союз шәрҡиәтселәр ассоциацияһы ойошторола. Уның составына республикаларҙағы 11 бүлек, 8 региональ төркөм, 39 фәнни институт, юғары уҡыу йорттары, мәҙәни-мәғрифәт учреждениелары инә. Уның төп бурыстарының береһе, уставта яҙылғанса, ”ватаныбыҙ шәрҡиәтен халыҡ-ара шәрҡиәт ойошмаларында күрһәтеү” була. Шуға ярашлы, донъя шәрҡиәтселәренең Токио, Гамбург, Будапешт, Монреаль ҡалаларында уҙғарылған халыҡ-ара конгрестарына делегациялар ебәрелә.

1993 йылда был ассоциацияның хоҡуҡтары Рәсәй Фәндәр академияһы эргәһендәге Шәрҡиәтселәр йәмғиәтенә күсте.

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәттең эшмәкәрлеге ныҡ әүҙемләште. Быға илдә барған демократик үҙгәрештәр, беҙҙең илде башҡа донъянан айырып торған ”тимер ҡоршау”ҙың юҡҡа сығыуы һәм, ғөмүмән, тотош Ер йөҙөндә барған глобализация йоғонто яһаны. Яңы технологиялар дәүерендә аралар яҡынайғандан-яҡыная һәм халыҡтарға һыйышып тыныс йәшәр өсөн берберенә ҡарата ихтирам, үҙ-ара аңлашыу йылдан-йыл мөһимерәк була бара.

1997 йылдан алып Бөтә Рәсәй шәрҡиәтселәр съезы даими рәүештә уҙғарыла. Бындай съездар 1997 йылда Элистала, 1999 йылда Ҡазанда, 2002 йылда Санкт-Петербургта, 2004 йылда Мәскәүҙә булды. Һәр съезда киләһе ике йыллыҡҡа йәмғиәттең президенты һайлана. Мәскәүҙә үткәрелгән съезда был абруйлы вазифаға мине һайлағайнылар. Алдағы ике йылға иһә был бурыс бүрәт ғалимы Борис Ванданович Базаровҡа йөкмәтелде. Ул — тарихсы, Рәсәй Фәндәр академияһы Себер бүлегенең Монгол ғилеме, буддология, тибетология институты директоры, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы. Күптән килгән йола буйынса, киләһе съезд 2008 йылда Улан-Удэла үткәреләсәк.

*Башкортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И.F.Илишев сығыш яһай*





*Шәрҡиәтселәр йәмғиәтенең яңы һайланған президенты Базаров Б.В.*

**— Быйылғы съездың Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тулыу алдынан үткәрелеүе һәм ошо сараның көн тәртибенә ҡуйылған төп темаларҙың береһе булыуы ла осраҡлы түгелдер?**

— Әлбиттә, был ваҡиғаның дөйөм Рәсәй күләмендә билдәләп үтелеүе бик дөрөҫ, сөнки Башҡортостан Рәсәй өсөн көнсығышҡа ишек булды. Бөгөнгө күҙлектән быға төрлөсә баһа бирергә мөмкин, мәгәр уның һәр ике яҡ өсөн файҙаһын инҡар итеү хилаф булыр ине.

Ғөмүмән, Башҡортостан Европа менән Азияның, ике бөйөк ҡитғаның, сигендә урынлашҡанлыҡтан, үҙенсәлекле үҫешкә эйә. Тәбиғәтенең күркәмлеге, матди байлығы, ҡабатланмаҫ этнографияһы менән ул көнсығыш һәм көнбайыш ғалимдарын элек-электән үҙенә ылыҡтырған.

Ә инде XVIII быуаттан башлап Рәсәйҙә Башҡортостан менән ҡыҙыҡһыныу бермә-бер көсәйә һәм экспедиция артынан экспедиция ебәрелә. 1734 йылда ”Ырымбур экспедицияһы” составында Рәсәй Фәндәр академияһының тәүге мөхбир-ағзаһы П.И.Рычков килә. Рус ғалимы һәм дәүләт эшмәкәре В.Н.Татищевтың Башҡортостандың тарихын һәм географияһын өйрәнеүҙә роле бик ҙур. П.С.Паллас, И.П.Лепехин, И.И.Георги, И.П.Фальктарҙың экспедициялары ла башҡорт халҡы тураһында бай материал туплай һәм тарихта ҡиммәтле мәғлүмәттәр ҡалдыра.

Был ҡатмарлы һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы осорҙа Башҡортостанда азатлыҡ көсәү ни тиклем көслө булһа, ғилемгә, мәғрифәткә ынтылыш та шул уҡ дәрәжәлә була. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаев халҡын азатлыҡ көрәшенә саҡырған ваҡытта, икенсе бер башҡорт Исмәғил Тасимов Рәсәйҙә беренсе булып батша чиновниктарынан юғары техник мәктәп — Санкт-Петербург тау училищеһы астырыуҙы юллап йөрөй. Әле Г.В.Плеханов исемендәге Тау институты булараҡ танылған был уҡыу йорто 1774 йылдың 28 июнендә, йәғни Башҡортостанда Крәҫтиәндәр һуғышы ялҡынланған мәлдә асыла. Һуңынан академик Д.И.Соколов был хаҡта: ”Берг-коллегияның эштәрен асып ҡараһаҡ, тау эшендә башбаштаҡ башҡорттар беҙҙең мәғрифәтебеҙгә сәбәпсе булыуына дәлилдәр табырбыҙ”, — тип яҙа.

*Рәсәй Фәндәр академияһының Шәрҡиәт институты директоры Рыбаков Р.Б.*



**— Ә Башҡортостан ғалимдары өсөн шәрҡиәт нимәнән ғибәрәт?**

— Беҙҙең республика өсөн шәрҡиәт фәненең әһәмиәтен мин бигерәк тә Әхмәтзәки Вәлиди менән В.В.Бартольд, А.Н.Самойлович кеүек мәшһүр ғалимдарҙың берлектәге эшмәкәрлегендә күрәм. Вәлиди, Бартольд кәңәшен тотоп, бер нисә тапҡыр Урта Азияға экспедицияға бара. Уларҙың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге, заманалар ҡатмарлы булыуға ҡарамаҫтан, артабан да дауам итә. Вәлиди совет илендә ”халыҡ дошманы” тип һаналған йылдарҙа Бартольд Төркиәгә ба-

рып лекциялар уҡый, ә Әхмәтзәки уларҙы аҙаҡтан бер китап итеп баҫтырып сығара. Ғөмүмән, Вәлидигә Рәсәй шәрҡиәтселегенең йоғонтоһо бик ҙур була. Шул уҡ ваҡытта Төркиәлә уның өсөн бөтә донъя шәрҡиәтселәре, шәреҡ илдәре менән аралашыу мөмкинлеге асыла.

Ә беҙҙә совет осоронда шәрҡиәт башлыса көнбайыш йоғонтоһонда үҫте. Миҫалға Башҡортостан фәнен генә алайыҡ. Һәр йәһәттән гелән Европаға ғына ҡараныҡ, үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы онотторҡ. Сәләм әт-Тәрджемән, Ибн Хордадбек (820—912), әл-Хваризми, әл-Фирғәни (IX быуат), Ибн Фаҙлан, Әбү-Али ибн Русте, Мөхәммәт әл-Истахри (X быуат), Әбү Хәмит әл-Гарнати, әл-Идриси (XII быуат), Казвини, Яҡут әл-Хамави (1179—1229), Әбүл-Хәйр-Рәшит әд-Дин (XII быуат), Ибн Халдун (XIV быуат) кеүек Шәреҡ тарихсылары һәм географтарының хеҙмәттәре менән тура-нан-тура түгел, рус теле аша таныштыҡ. Үҙебеҙҙә белгестәр әҙерләнмәне, исламды бары тик дин генә тип ҡараныҡ һәм прогрессив ҡаҙаныштарын инҡар иттек. Ә бит ислам донъяһы киң. Беҙгә мәғрифәт, мәҙәниәт, сәнғәт, фән ислам аша килеп ингән һәм, совет осоронда быны ҡайһылай ғына инҡар итергә тырышып ҡараһаҡ та, тарихыбыҙға, булмышыбыҙға юйылмаҫлыҡ йоғонто яһаған. Беҙҙең әҙәбиәт тә Азия әҙәбиәттәре менән бер ағымда барлыҡҡа килгән, ғәрәп, фарсы, Алтын Урҙа, сығатай, осман әҙәбиәттәренең йоғонтоһонда үҫкән, ғәрәп яҙмаһын ҡулланған. Шуға күрә халҡыбыҙҙың рухи һәм матди ҡиммәттәрен Европа күҙлегенән сығып түгел, Рәсәйҙең Октябрь революцияһына тиклемге шәрҡиәтселәре традицияһында, Азия күҙлегенән сығып ҡабул итергә һәм өйрәнергә кәрәк. Башҡорттар элек ғәрәп яҙмаһы менән үҙҙәренең тарихын һәм шәжәрәләрен генә теркәп ҡалмаған, Шәреҡ халыҡтары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән, Шәреҡ илдәренең тарихы, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған. Был бәйләнештәр көнбайыш илдәре менән элемтәгә ҡарағанда күпкә тығыҙыраҡ булған һәм үҙ-ара матди мәнфәғәттәргә түгел, ә рухҡа, ислам Шәрғенең мәңгелек ҡиммәттәренә таянған. Төрки телле халыҡтар күпләп йәшәгән Рәсәй ҙә гел генә Европаға ҡарап тора алмай. Һуңғы йылдарҙа үҙәктә быны аңлай башланылар. Ике теллелекте, йәғни һәр республиканың төп халҡы теле һәм рус теле мәсьәләһен хәҙер Мәскәү ғалимдары үҙҙәре күтәреп һәм яҡлап сыға.

**— Бөгөн башҡорт шәрҡиәтселәре алдында ниндәй бурыстар тора?**

— Тарихи ҡомартҡылар ҡәбер таштарындағы яҙыуҙар, ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар, шәжәрәләр, ярлыҡтар, указ һәм килешеүҙәр кеүек, ғәрәп, фарсы һәм төрки телдәрендәге башҡа документтар рәүешендә һаҡланған. Былар барыһы ла шәрҡиәт фәнен ғәмәли, йәғни сығанаҡтарҙы өйрәнеү йүнәлешендә үҫтереүҙе, фәнни даирәгә яңы тарихи, лингвистик һәм әҙәби ҡомартҡыларҙы индереүҙе талап итә.

Бөгөн беҙгә Башҡортостандағы Шәреҡ ҡулъяҙмаларын ныҡлап өйрәнеү, уларҙы фәнни әйләнешкә индереү, китаптарҙың ретроспектив библиографияларын нәшер итеү, тарих, әҙәбиәт һәм тел ҡомартҡыларын тәржемәләү һәм баҫтырып сығарыу, башҡорт халҡының тарихи, әҙәби һәм тел йәһәтенән шәрҡиәт менән бәйле мәсьәләләре өлкәһендә ентекле тикшеренеүҙәр үткәреү буйынса бик күп эшләйһе бар.

Һуңғы ун йыл эсендә ғалимдарыбыҙ тарафынан күп телле һүҙлектәр, энциклопедик хеҙмәттәр, бер нисә тиҫтә монография әҙерләнде һәм

донъя күрҙе. Улар Рәсәй һәм сит ил ғалимдары араһында хуплау тапты. Өфө Фәнни үҙәгенең Этнологик тикшеренеүҙәр үҙәге хеҙмәткәрҙәре халыҡ-ара алты проектты эшләүҙә ҡатнашты. Үҙәк Париждағы Славян тикшеренеүҙәре институты менән бәйләнеш урынлаштырҙы һәм профессор Роже Порталдең 1906—1994 йылдарҙа Башҡортостандың феодаль осоро тарихы буйынса баҫылып сыҡҡан һәм әлегәсә донъя күрмәгән хеҙмәттәрен алды. Уның ”Башҡортостан XVII—XVIII быуаттарҙа” тигән китабы тәржемә ителде һәм баҫылып сыҡты. Сит ил ғалимдары менән бәйләнештәр һәм хеҙмәттәшлек нығый, киңәйә бара.

Филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов Анкара ҡалаһының Ататөрк исемендәге Мәҙәниәт үҙәгендә әҙерләнгән 30 томлыҡ ”Төрки халыҡтар әҙәбиәте тарихы” тигән хеҙмәттең башҡорт өлөшөнә етәкселек итә. Ошо уҡ Үҙәк әҙерләгән ”Төрки донъяһы әҙәбиәте” күп томлы баҫмаһы өсөн филология фәндәре докторҙары Ә.М.Сөләймәнов, Ф.А.Нәҙершина, Р.Ә.Солтангәрәева һәм филология фәндәре кандидаты Г.Р.Хөсәйенова, Л.К.Сәлмәновалар башҡорт фольклоры буйынса мәҡәләләр яҙҙы.

Сармат коллекцияһын Америка, Италия музейҙарында, Санкт-Петербургтағы Дәүләт Эрмитажында ойошторолған күргәҙмәләрҙә күрһәтеү донъя йәмәғәтселегендә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул ителде. ”Евразия цивилизацияларының тарих сығанаҡтары” Бөтә Рәсәй мәктәп-семинарында Башҡортостан Фәндәр академияһы, уның Гуманитар фәндәр бүлеге тарафынан тарих, тел, әҙәбиәт, фольклор сығанаҡтарын өйрәнеү буйынса ҙур эш алып барылыуы билдәләнде. Ж.Ғ.Кейекбаев, З.Ғ.Ураҡсин, Р.Ғ.Кузеев, Ғ.Б.Хөсәйенов, Н.Ф.Мәжитов, Т.М.Ғарипов, М.В.Зәйнуллин, Р.Н.Байымовтарҙың ғилми мәктәбе бөтә Рәсәй кимәлендә танылыу яуланы.

Аҡыл менән белем бүлешкәндән арта тигәндәй, халыҡ-ара, төбәк-ара, республика конференцияларын һәм кәңәшмәләрен ойоштороу һәм уларҙа ҡатнашыу фәнни мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеүгә булышлыҡ итә.

*Съезда катнашыусыларҙан бер төркөм*



**— Был йәһәттән эштәрҙең артабан әүҙемләшеүенә булып үткән съездың ыңғай йоғонтоһо булырлыҡмы?**

— Съездың беҙҙең республикала үткәрелеүе үк Башҡортостан фәненең торошона баһа биреү булһа, икенсе яҡтан, донъя Рәсәй кимәлендәге бәйләнештәрҙе нығытыу йәһәтенән дә ифрат файҙалы. Съезға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән вәкилдәр килде, араларында ғилми учреждениеларҙың етәкселәре лә күп ине. Сөнки съездың төп маҡсаты — фәнни-ойоштороу мәсьәләләрен хәл итеү. Шулай уҡ Төркиә, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан кеүек төрки телле туғандаш дәүләттәрҙән дә делегациялар булды.

Рәсәй Фәндәр академияһының Шәрҡиәтселәр йәмғиәте 2004—2006 йылдарҙағы ғилми-ойоштороу эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһаны. Съезд делегаттары ”Рәсәй халыҡтарының тарихи яҙмышында — Шәреҡ” һәм ”Башҡортостандың 1557 йылда үҙ ирке менән Рәсәй составына ҡушылыуының тарихи әһәмиәте” тигән ике төп тема буйынса докладтар тыңланы.

Отчет осоронда Шәрҡиәтселәр йәмғиәте үҙенең эшмәкәрлеген һиҙелерлек әүҙемләштерҙе, тип баһаланды. Рәсәй Фәндәр академияһы учреждениеларында, милли республикаларҙың Фәндәр академияларында, юғары уҡыу йорттарында, китапханаларҙа, музейҙарҙа, архивтарҙа тарих, филология, философия, иҡтисад, социология һәм Рәсәйҙең, Шәреҡ илдәренең рухи донъяһы буйынса киң һәм тәрән тикшеренеүҙәр алып барыла.

**— Съезд барышында заман тыуҙырған объектив сәбәптәр арҡаһында байтаҡ ваҡыт шәрҡиәтселәрҙең етди һәм уңышлы эшләгән өлкән быуынын алмаштырырлыҡ кадрҙар килмәүе, һуңғы йылдарҙа ғына йәштәрҙең фәнгә ылыға башлауы хаҡында һүҙ күп булды. Шәрҡиәт буйынса тикшеренеүҙәр өлгәшкән ҡаҙаныштарға һәм яңы кадрҙар әҙерләүгә Ҡазан, Силәбе, Ырымбур, Иркутск, Екатеринбург, Ҡыҙыл кеүек ҡалаларҙың юғары уҡыу йорттарында шәрҡиәт факультеттары асылыуҙың ыңғай һөҙөмтәһе икәне һыҙыҡ аҫтына алынды. Ә беҙҙә кадрҙар мәсьәләһе нисек тора?**

— Өфөлә Шәреҡ институты ойоштороу идеяһы беҙҙә күптән үк бар. Башҡортостанда элек көслө булған, әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, төрлө сәбәптәр арҡаһында юғалтылған шәрҡиәт традицияларын ҡайтанан тергеҙеү һәм заман кимәленә күтәреү өсөн хөкүмәт яғынан ярҙам һәм тейешле шарттар булдырыу мөһим. Башҡортостандың Шәреҡ илдәре менән туранан-тура бәйләнештәре киңәйгән һайын, республикабыҙҙа Шәреҡ халыҡтарының телдәренә, тарихына, көнкүрешенә, йолаларына, мәҙәниәтенә һәм иҡтисадына хәбәрҙар белгестәргә ихтыяж арта бара. Шуны күҙ уңында тотоп, 1993 йылда уҡ аныҡ тәҡдимдәр менән хөкүмәткә махсус хат әҙерләгәйнек. Съезда ла Башҡортостандағы фәнни мөмкинлектең ҙурлығын иҫәпкә алып, Рәсәйҙәге башҡа шәрҡиәт үҙәктәре менән хеҙмәттәшлектә Башҡорт дәүләт университетында Шәреҡ факультеты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Шәрҡиәт бүлеге асыуҙың өлгөрөп еткән мәсьәлә булыуы билдәләнде. Был күркәм эштең яҡын араларҙа бойомға ашырыласағын тулы ышаныс менән әйтеп була бөгөн.

*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА әңгәмәләште.*